

# Исҡужиндар. Баласаҡ иҫтәлектәре

# Искужины. Воспоминания детства

# Childhood memories by the Iskuzhinys`



# Мөхәммәтғәли Исҡужиндың бала сағы

Төҙөүсеһе: Ә.С.Түләгәнова
Редакторы: М.С. Бураҡаева
Рәссамы: Г.Р.Ҡужабаева

Составитель: А.С. Тулеганова
Редактор: М.С. Буракаева
Оформитель: Г.Р.Кужабаева

Translated into English
by A.I. Hasanova

## Мәктәпкә

Мин 9 йәштә генә мәктәпкә барҙым. Һуғышҡа тиклем, 1936 йылда, Урта Моталда мәктәп яңы асылғайны. Бүрәнәнән һалынған мәктәп үтә ҙур түгел, беренсе кластан дүрткә тиклем төрлө йәштәге уҡыусыларҙы бер бүлмәлә уҡыталар. Беҙҙең ауылдан ғына түгел, тирә-яҡтан да килеп уҡыйҙар ине.

Уҡыуҙы мин икенсе сиректән башланым. Атайым вафат булғас, әсәйемә ярҙам иттем. Ҡышҡылыҡҡа аҙ булһа ла ашлыҡ әҙерләп, өҫ-башты бөтәйтеп алыр өсөн, быҙау көтөргә яллана торғайным. Уҡытыусы алдына тәү тапҡыр аяҡ баҫҡанда, мин уҡый ҙа, яҙа ла белдем, сөнки Тимерғәли ағайым өйҙә өйрәткәйне.

## В школу

В первый класс я пошел в 9 лет. В 1936 году в нашей деревне Среднее Муталово впервые открыли школу. Школа была небольшой, деревянной. С первого по четвертый класс дети всех возрастов учились в одном классе. Это были дети  нашей деревни и соседних сел. Я учебу начал только со второй четверти. Отец умер, нужно было помогать матери. Летом нанимался пасти телят, чтобы запастись на зиму зерном, прикупить одежду. До школы умел читать и писать - дома меня научил старший брат Тимергали.

## To school

I went to the first grade at the age of 9. In 1936, before the war, a school was opened for the first time in our village of Middle - Mutalovo. The school was small, wooden. Children of all ages studied in one and the same class from the first to the fourth grade. There were the children of our village and neighboring villages. I started my studies only since the second quarter. My father died, I had to help my mother. In summer I was hired to herd calves to stock up on grain for winter and to buy clothes, too. I could read and write before school - my elder brother Timergalihad  taught me  before at home.



## 20 йомран

Яҙ башы. Өсөнсө йыл һуғыш бара. Тиҙҙән ҡаҡы, йыуа һәм башҡа үләндәр күренер, тип өмөтләнәбеҙ. Балыҡҡа талдан үрелгән мурҙа һалабыҙ ҙа үҙебеҙ йомранға һунар итәбеҙ. Һунарҙа юл уңһа, әнәйебеҙ аш бешерә.

Минән бәләкәйерәк Миҙхәт менән Зәки йомранды ояһы эргәһендә көтәләр. Күнәк менән ояға һыу ҡоялар, килеп сыҡһа –ҡаса бит ул, ныҡ ҡарауыллайҙар! Көнөнә ҡайһы ваҡыт егерме йомран эләктерә торғайныҡ. Артып ҡалғанын киптереп, һаҡлаған саҡтар ҙа булды...

## 20 сусликов

1944 год. Начало весны. Скоро появятся сурепка, дикий лук и другие съедобные травы. Можно будет ловить рыбу плетеной мордой из свежих ивовых веток.

А пока только на сусликов охотиться. Если посчастливится – принесем домой сусликов, мама суп сварит. Мидхат и Заки ходили с ведрами, караулили норы. Они были чуть младше меня. Бывало, я ловил по 20 сусликов в день, сушил, заготавливал впрок.

## 20 gophers

1944 year. The beginning of spring. Soon there will appearsurepka, wild onions, and other edible herbs. It will be possible to fish with a braided muzzle made of fresh willow branches.

In the meantime, the only thing is hunting ground squirrels. If we are lucky, we will bring gophers home, mom will cook soup. Midhat and Zakiwould walk with buckets and guarded the burrows. They are a little younger than me. We managed to catch 20 gophers a day. Some of them we dry and store them for the future.



## Бүреләр

Ул көн хәтеремдә ныҡ уйылып ҡалды. Былай булды ул хәл. Йәүҙәт мырҙам әнәйемә колхоз һарыҡтарын көтөргә ярҙам итә ине. Тау битләүенә мин дә килдем. Ашап, сәй эсеп, йылынып килһен өсөн, мырҙамды ҡайтарып ебәрҙем. Ҡапыл колхоз көтөүенә ҡоторонған ас бүреләр ябырылды. Улар йәшен тиҙлегендә һарыҡтарҙың ҡорһаҡтарын яра ла, икенсеһенә тотона. Мин һыбай килеш ҡоторған бүреләрҙе сыбыртҡым менән ярам, ҡурҡышымдан йән өҙгөс тауыш менән аҡырам. Ҡан еҫенән ҡоторонған йыртҡыстар мине бар тип тә белмәй, малдарҙы ҡыралар ғына. Моғайын, улар ҙа кемдән ҡурҡырға, кемдән юҡ икәнен беләләр. Тотош тигәндәй көтөүҙе йыртҡылап ташланылар.

## Волки

В тот день на меня напала большая стая волков! Это было так. Мой брат, маленький пастушок Явдат, помогал матери пасти колхозных овец. Я пришёл на пастбище. Отпустил брата домой согреться, отдохнуть, чай попить. Откуда ни возьмись, появились разъяренные хищники! Я отчаянно носился на коне, и, скорее от страха, дико кричал, размахивая кнутом! Волки не уносили добычу, а только острыми клыками перекусывали артерии на шее овец и вспарывали им животы… Звери, опьяневшие от вкуса и запаха крови, будто, куражились, показывая мне, оцепеневшему от ужаса, свою ловкость и удаль…Стадо было почти все уничтожено…

## Wolves

That day I was attacked by a large pack of wolves! It was like that. My brother, a little shepherd boy Yavdat, helped our mother to herd collective farm sheep. I came to the pasture and let my brother go home to warm up, relax and drink tea. Out of nowhere, furious predators appeared!

I was desperately running around on  the horse, and rather out of fear, shouting,  wildly, brandishing a whip!

The wolves were not carryingoff their prey, but only with sharp fangs were biting the arteries on the sheep's neck and ripping open their bellies... The animals, intoxicated by the taste and smell of blood, seemed to be bragging, showing me, numb with horror, their agility and prowess…The herd was almost all destroyed…



## Йәйен

Асығып йөрөгән саҡтарҙа, иң ҙур табыш булып иҫемдә ҡалған. Миңә 17, мырҙам Йәүҙәткә 14 йәш ине. Көйөргәҙе йылғаһында мурҙаға егерме биш ҡаҙаҡ тирәһе йәйен эләктергәйнек. Хатта күпте күргән балыҡсылар ҙа ғәжәпләнделәр: "Нисек ярға һөйрәп сығарҙығыҙ?"- тип шаҡ ҡаттылар.

## Сом

Мне было 17, а брату Явдату – 14 лет. Как-то раз мы поймали в реке Куюргаза огромного сома – он весил 25 килограммов. Это был самый удачный улов!

Даже бывалые рыбаки удивлялись, как нам удалось вытащить её на берег. Сома повесили на кол в чулане, хвост рыбы доставал до пола…

## Catfish

I was 17 years old and my brother Yavdat was 14 years old. Once we caught a huge catfish in the Kuyurgaza River – it weighed 25 kilograms. It was the most successful catch!

Even the experienced fishermen were surprised how we managed to pull it ashore. The catfish was hung on a stake in the lumber-room, the tail of the fish reached the floor…





## Юлға

1944 йылдың йәй башы. Ауыр һуғыш йылдары. Йән аҫрау, астан үлмәҫ өсөн, халыҡ Үзбәкстан яҡтарына юлланды. Ташкент - икмәкле ҡала - ул йылдарҙа ас-яланғас йәшәүсе күптәрҙең хыялы ине. Ауылдарҙа машиналар юҡ. Ырымбурға тиклем дөйәһе булған ҡаҙаҡ ҡартын ялланыҡ. Унын арбаһына барлы-юҡлы әйберҙәребеҙҙе тейәп, кәзәне, һыйырҙы эйәртеп, юлға сыҡтыҡ. Йөҙ саҡрым араны, әнәй менән йәйәүләп үттек. Ҡарғалыға еткәс, йылға ярында төнгөлөккә туҡтаныҡ. Һыйырҙы һауып, тамаҡ ялғап алдыҡ. Көтмәгәндә ҡарлы ҡатыш ямғыр яуа башланы, әйтерһең, тәбиғәт ялан аяҡлы малайҙарҙы һынап ҡарарға булды.

## В дорогу

Это было ранним летом 1944 года. В тяжёлые голодные, холодные годы, народ, чтобы выжить, потянулся в Узбекистан. Ташкент – город хлебный– была мечта тех, кто жил впроголодь, стараясь изо всех сил выжить. В те годы в деревнях машин не было. До Оренбурга наняли одного казаха, у которого был верблюд.К арбе привязали корову, козу. За ними мать ссыновьями пешком двинулись в путь более 100километров. Когда прошли деревню КаргалыОренбургскойобласти,зарекойостановилисьнаноч лег.Подоив корову, перекусили.Мы прошли весьпутьбосоногими,атутпошелснегс дождем!Будтоприрода нас всех испытывала на прочность.

## On the way

It was the early summer of 1944. In the hard, hungry, cold years, the people headed their ways to Uzbekistan in order to survive. Tashkent – the city of Bread – was the dream of those who lived half-starved, trying their best to survive. In those years there were no cars in the villages. To reach Orenburg, we hired one Kazakh who had a camel.

We had walked all the way barefoot, and then it started snowing and raining! It was as if nature was testing us all for strength.



Берешмәнек, Ырымбурға тиклем йәйәү барып еттек. Ҡала баҙарында кәзә менән һыйырҙы һаттыҡ. Кәзә өсөн алған ике меңде ҡаҙаҡҡа юл хаҡына бирҙек. Һыйырҙы утыҙ ике меңгә һатып, Тимерғәли ағайыма күстәнәс, беҙгә кейем – һалым, поезға билет алдыҡ.

Бына еребеҙ, гәзиз Башҡортостаныбыҙ - тыуған илебеҙ, туған телебеҙ тураһында бала саҡ хәтирәләре...

Пешком,босиком по снегу дальше до Оренбурга. Пройдя таким образом два дня, добрались до городского базара, чтобы продать козу и корову. Козутут же продали, выручив две тысячи рублей. Эти деньги отдали тому казаху, который помог нам добраться. Корову продали за 32 тысячи. На этиденьги купили гостинцы брату Тимергали, кое-какую одежду для нас. Взяли билеты на поезд. Отсюда начался путь в далекий край.

Это наши самые дорогие детские воспоминания о родных краях, о Родине, о родном Башкортостане, о родном языке…

On foot, barefoot in the snow moved to Orenburg. After we had been walking for two days on this way, we got to the city bazaar to sell a goat and a cow. The goat had been immediately sold for two thousand rubles. This money was given to the Kazakh who helped us get here. The cow was sold for 32 thousand rubles. With this money, we bought gifts for Timergali's brother, some clothes for us. We took train tickets. From here the journey began to a distant land. These are our dearest childhood memories of our native land, the Motherland, our native Bashkortostan, our native language…



Оренбургъ. Вокзалъ.



**Күмертау**
**2023**